

*Тәнзилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА*

# "Башҡорт моңо уралһын..."

## Башҡортом

Иман һатып, ауыр гонаһ
Юҡ, ҡылмаған башҡортом!
Хәйләнән, мәкер-яланан
Туҡылмаған башҡортом.

Бер ҡатлылығы менән ул
Ас ҡарғанан суҡылған.
Аҫтыртындарҙан һаҡланмай
Нисә быуын уҡылған?

Йөрәгендә моң йөрөтә
Аҫыл йәнле башҡортом.
Яман уйлы ғына уның
Баш осонда таш тотор.

Ҡуйынында башҡорт бер ҙә
Ҡара йылан һаҡламаҫ.
Ҡара йылан һаҡлағанды
Бер ҡасан да яҡламаҫ.

Ҡуйынында башҡорт гелән
Һаҡлар дуҫын-ҡурайын.
Башҡорт хаҡында уйлаһам,
Кәүҙәм китә турайып.

Башҡорт хаҡында уйлаһам,
Танауҙы күккә сөйәм.
Бына шулай мин халҡымды
Ғорурлыҡ менән һөйәм.

## Халҡым

Халҡым
Ҡайһы ваҡыт ялҡын,
Ҡайһы ваҡыт
һалҡын.

Халҡым
Байраҡ булып ҡалҡһын,
Ҡояш булып балҡыһын!

## Башҡортостан — оло ауыл

Таңды ҡаршылап, талпына
Моңланып, аҫыл ҡурай.
Был моң, һандуғастай осоп,
Бөтә ауылды урай.

Башҡортостан — оло ауыл,
Үҙ теле һәр урамдың.
Шулай ҙа,
көн дә
һәр өйҙөң
Ҡыйығына, ситәненә,
Ҡоймаһына, ҡапҡаһына
Башҡорт моңо уралһын!
Башҡорт моңо уралһын!

## Төтөнһөҙ ауыл

Яуҙа һалдат сафтан сыҡҡан һымаҡ
Сафтан сыға бара мейестәр ҙә.
Хәҙер нурлы мейес урынына
Газ торбаһы үтә мөйөштәрҙән.

Өй түрендә мейес емерелгәс,
Ауылдың да йәме киткән кеүек.
Утын ҡотон алмай бешкәнгәме,
Икмәктең дә тәме киткән кеүек.

Күккә биҙәк һалған күк төтөндө
Һағына бит инде Айҙың Айы!
Булмышыбыҙ йәмһеҙләнә бара,
Тормошобоҙ еңеләйгән һайын.

***

Яу баҫырлыҡ рәте булғанда ла,
Ил баҫырлыҡ һәләте булмаған.
Ауыҙына ал ҡан тулғанда ла,
Яттан үҙен йәлләтер булмаған.

Ҡабырғанан аҫып ҡуйғанда ла
Иманынан һис тә ваз кисмәгән,
Быуат һайын үткерләнгән ҡылыс
Башҡортомдоң башын аҙ киҫмәгән.

Башҡортомдоң әйтеп аңлатҡыһыҙ
Моңло йырҙарынан ҡанат үҫә.
Киләсәккә көслөләрҙең генә
Үлмәҫ даны
ҡабат-ҡабат күсә.

## Ҡаяу

Йөрәгемә ҡаҙалғанһың
Һурылмаҫ ҡаяу булып.
Йәшәһәңсе терәк булып,
Ярҙамсыл таяу булып!

Ҡулдан төшмәҫ ҡәләмемдең
Буяуы булып ҡара!
Тик ҡаҙалған ҡаяуыңдан
Йөрәгем һулып бара шул,
Йөрәгем һулып бара.

## Һинһеҙ

Һинһеҙ тере етеммен мин —
Шулай дөрөҫ әйтәмме?
Һин — ҡояшым булмағанда
Белмәгәйнем йәй тәмен.

Дөм ҡараңғы булыр төнөм,
Йылмаймаһаң ай булып.
Һинең менән йәшәйем мин,
Күңелдәрем бай булып.

Мендерҙең һин иң түренә
Бәхет тигән ҡаяның.
Төшһәм, унан төшөрмөн мин
Һиңә генә таянып.

***

Боронғолар, көлгә күмер күмеп,
Күҙ ҡараһы кеүек һаҡлаған.
Минең хисем,
баш бирмәйсә ярһып,
Күңел мөрйәһенә ҡаҡлыға.
Мөрйәләрҙән оскан хис осмотон
Шәкәр итеп иретә киң йыһан.
Шул хистәрҙе әрәм-шәрәм итмәй
Көлгә генә күмеп мин ҡуйһам,
Кәрәк кешем
кәрәк сакта ғына
Ҡабыҙыр ине һөйөү усағын.
Хисем түгел, үҙем эрер инем,
Тойоп уның ҡайнар ҡосағын.

***

Телһеҙ ил — ул мөрйәһеҙ өй,
Халыҡ унда тонсоға.
Йонсоу, зәғиф, сырхау улар,
Һауа етмәй, йонсоғас.

Телле ил ул — ҡараулы йорт —
Тәҙрәләрҙән нур аға.
Усағында уты һүнмәй,
Халҡы телен ҙурлағас!

## Шәйехзада

Ғүмерең — миҙгел,
Яҙ миҙгеле,
Йырлы йәшлек.
Хоҙай һиңә
Һанап биргән
Йылды, йәште.

Эштәреңде генә
Хоҙай
Һанамаған —
Китаптарың
Донъя күрә,
Ана, һаман!

Бер миҙгелдә
Өлгөргәйнең
Сәсеп-урып.
Алдылар шул
Йөрәгеңде
Ҡайырып,
Һурып!

Ҡар өҫтөндә
Өҙгөләнде
Ҡанлы тәнең.
Рәнйеү,
Һағыш
Ҡамауында
Ҡалды йәнең...

Көй өҙөлдө,
Ҡыл өҙөлдө,
Тынды тауыш...
Ай ҡолаһы,
Ҡояш тыуҙы
Ғәрип,
Ауыш...

Эй, һин, тарих!
Рәхимһеҙһең,
Аяуһыҙһың!
Ел-ямғырҙар
Һынағанда
Таяуһыҙһың!

Илдең аҫыл
Егетен дә
Яҡламаның!
Ғазраилдың
Салғыһынан
Һаҡламаның!

...Ҡаҡшатманы
Шағир рухын
Ғәйеп, яза —
Еңеү менән
Ҡайтты беҙгә
Шәйехзада!

## Күҙ нурҙарың

Алтын тамсыһылай ауыр
Һинең күҙең нурҙары.
Шул тамсынан битем янып,
Бөтәм инде буҙарып!

Бал тамсыһылай татлы бит
Һинең һәр әйткән һүҙең.
...Йәнең нисек иремәһен,
Яратмай ҡара түҙеп!

Көтмәгәндә ялмап алды
Мине һөйөү уттары,
Һөйөү усағын йөрәктән
Ала алмам ҡуптарып.

"Үтә ҡыҙыл" тиҙ уңмаһын,
Һүнмәһен үтә ҡыҙыу.
Һин дә уттан яралғанһың,
Мин дә ялҡын-ут ҡыҙы.